***Рәмилә СИБӘҒӘТОВА,***
***филология фәндәре кандидаты,***
***Рәсәй Фәндәр академияһы Өфө Ғилми үҙәгенең***
***Ғилми китапханаһы мөдире***

# Мөхәмәтсәлим Өмөтбаев китаптары

Рәсәй Фәндәр академияһы Өфө ғилми үҙәгенең Ғилми китапханаһында күренекле башҡорт ғалимы, телсе, этнограф, мәғрифәтсе, фольклорсы Мөхәммәтсәлим Өмөтбаевтың тормош юлына һәм ғилми эҙләнеүҙәренә бәйле байтаҡ мәғлүмәттәр һаҡлана.

Мөхәммәтсәлим Өмөтбаевтың тормош юлын һәм шәхси архивын өйрәнгән ғалимдарыбыҙ иҫбатлауынса (Ғ.Б.Хөсәйенов, Ғ.С.Ҡунафин, М.Х.Нәҙерғолов), ул үҙ ғүмере эсендә бөтәһе 11 китап авторы була. Шуларҙың араһынан бары тик алты китабы ғына донъя күрә, ә ҡалғандары ҡулъяҙма рәүешендә ҡала. Шул нәшер ителгән хеҙмәттәре араһынан 5 китабы беҙҙең Ғилми китапхананың Һирәк китаптар секторында һаҡлана — 4 китап төп нөсхәләрҙән булһа, береһе, ҡыҙғаныска ҡаршы, күсермә генә. Донъя күрмәй ҡалған хеҙмәттәре араһынан "Фарсы нәхүсе" ("Фарсы грамматикаһы") ҡулъяҙмаһы айырыуса ҡиммәтле сығанаҡ тип иҫәпләнә.

*"Мохтасар әл-виҡайә мөҡәддәмәсе" китабы титулы*


مختصر الوقاية مقدمه‌سی
اوشبو رساله‌نی روسیه تلندان ترکی لغتنه ترجمه قیلوچی دینی محمدیه‌نینک
اورینبورغ اسکی دوخاونی صوبرانیه محکمه‌سنده رتبه‌دار هم السنه
شرقیه ترجمانی کالّلیژ اسکی سیکریتار محمد سلیم
بن ایشمحمد امیدبایف
(شهر اوفیده اول کره طبع و تمثیل قیلنمش کتابدور)
بو کتاب باصمه‌سنه رخصت بیرولدی پیطربورغده ۳۱ نچی غنوارده
۱۸۹۰ نچی یلده
اول کره باصمه اولنمشدور اوفیده پیروفننک طبعخانه‌سنده محمد سلیم
بن ایشمحمد امیدبایفننک خراجاتی ایلان ۱۳۰۷ نچی سنه‌ده

Ғалимдың тәүге хеҙмәттәренең береһе булған "Мохтасар әл-виҡайә мөҡәддәмәсе" китабы 1890 йылда Өфөлә И.С.Перов типографияһында Мөхәмәтсәлим Өмөтбаевтың үҙенең аҡсаһына баҫтырып сығарыла. Китап бөтәһе 90 биттән тора. Иҫке төрки телендә (шифры: рб/3717. 4-се китап). Был китапты М.Өмөтбаев, күреүебеҙсә, Ырымбурҙа Духовное собраниеның чиновниктар канцелярияһында тәржемәсе булып эшләгән сағында руссанан иҫке төрки теленә тәржемәләп баҫмаға тәҡдим иткән. Китаптың тышында былай тип бирелә: "Ошбу рисәләне русиә теленән төрки лөғәтенә тәржемә ҡылыучы дини мөхәмәдийәнең Оренбургский духовный собранийә

мәхкәмәсендә рәтбәдәр һәм әс-синәғ шәрҡийә тәржемәне коллежский секретарь Мөхәмәд Сәлим бән Ишмөхәмәд Өмөдбаев. (Шәһәр Өфөдә әүүәл керә табағ үә тәмҫил ҡылынмыш китабдыр). Бу китап басмасына рөхсәт бирелде Петербургтә 31-нче ғинуарҙа 1890-нчы йылда. Әүүәл кенрә басма улынмышдыр Өфөдә И.С.Перовның табағханәсендә Мөхәмәд Сәлим бән Ишмөхәмәд Өмөдбаевның хәрәжәте илән 1890 сәнәдә".

Тышлыҡтың һуңғы битендә библиографик күрһәткестәре рус телендә бирелә: "История мюхтесарюль-викаета или сокращеннаго курса мусульманского законоведения. Перевод чиновника Оренбургскаго Магометанскаго Духовнаго Собрания Коллежскаго Секретаря Мухаммет Салима Ишмухаметевича Умитбаева. Уфа: Типография И.С.Перова. 1890".

Был хеҙмәт башҡа китаптар менән берлектә булған бер ҡалын төпләмәлә килеш һаҡланған. Төпләмәләге штамп буйынса беҙ уны ҡасандыр Өфөләге "Ғәлиә" мәҙрәсәһенең китапханаһында һаҡланған китаптарҙың береһе булған тип әйтә алабыҙ.

Мәғрифәтсенең икенсе хеҙмәте — бай йөкмәткеле, ижадының һәм ғилми эҙләнеүҙәренең бер тос емеше булған "Йәдкәр" китабы. Беҙҙең китапхана фондында әҫәр 3 данала һаҡлана. Ҡыҙғанысҡа ҡаршы, бөтә нөсхәләр ҙә яҡшы сифатта тип әйтеп булмай. Улар тураһында ла бер аҙ мәғлүмәт биреп китәйек.

1-се экземпляр, айырым төпләмә титул һәм беренсе биттәренең ситтәре йыртылыу сәбәпле, калька менән йәбештерелгән. 121—122-се биттәре юҡ (шифры: рб/1138).

2-се экземплярҙың тышлығы юҡ. 1-се бите йыртылған, башҡа биттәренең остары туҙған, ҡайһы берҙәре йыртылған. 2—4-се биттәре юҡ (шифры: б/1146).

Өсөнсө экземпляр иһә өс китап бергә төпләнгән төпләмәнән ғибәрәт. "Йәдкәр" тәүге китап булып тора, төпләмәнең шифры: рб/6074. Китап яҡшы һаҡланған, бөтә биттәре лә бар.

*"Йәдкәр" китабы титулы*


يادكار

محمد سليم بن ايشمحمد اميد بابى نتك تصنيفلرندان

بيتلر هطلر كارناوانيه يعنى ايمبراطر الكساندر الكساندروڤيچنڭ تاج كيگان
حكايتى خبر آقطاش خان مع ذالقرنين شجرهٔ تاتار طارغاوت قالماقلرى
باشقرطلر خبر فرعون وروم آى باشلرى ودخى حكايتلر

بوكتاب باصمه اولنمشدر قزانده دومبراواسكى ننك طبع خانه سنده
١٨٩٧ نچى يلده

باصمه‌سنه رخصت بيرلدى سانكى پيطربورغده ٣ نچى سينتابرده ١٨٩٧ نچى يلده

Дозволено цензурою С.-Петербургъ 30 Сентабря 1897 года.
Типографія В. Л. Домбровскаго въ Казани.

Китаптың титул битендә ошондай мәғлүмәт бирелә: "Йәдкәр". Мөхәммәдсәлим бин Ишмөхәммәд Өмөдбаевның тәснифләрендән.

Бәйетләр, хатлар, коранация йәғни император Александр Александровичтың таж кейгән хикәйәте, хәбәр Аҡташ хан мәғә (менән. — ***Авт.***) Зөлҡәрнәйен, шәжәрәиғ татар, Тарағут ҡалмыҡлары, башҡортлар, хәбәр фирғәүен үә Рум, ай башлары үә дәхи хикәйәтләр.

Бу китап басма улынмыштыр Ҡазанда Домбровскиның табағханасында 1897-нче йылда. Басмасына рөхсәт бирелде Санк-Петербургда 30-нче сентәбрдә 1897-нче йылда.

Ҡазан: Типография Б.Л.Домбровскаго, 1897 йыл. 122 бит. Иҫке төрки телендә”.

Ҡитаптың һуңғы битендә “Бу битләрен Мөхәмәдсәлим Өмөдбаев “Аҫар” хаҡында яҙып биргән иде” тип ҡара менән яҙылған ҡулъяҙма бар.

Был китаптар төпләмәһенең хужаһы кем булғанын билдәләп китер өсөн, ҡалған китаптар тураһында ла әйтеп китергә кәрәк.

Төпләмәләге икенсе китап Ғәли бин Сәлих ал-Вадиҙың (Мөхәмәтғәли Соҡрыйҙың) “Ҡитаб шәмғ әз-зийағ фи тәзкирәт ҡум әһүл әз-зийағ” тигән китабы. Баҫмаға Санкт-Петербургта 1882 йылдың 2 ғинуарында нәшер итеү рөхсәте бирелә һәм 1883 йылда Ҡазанда Вячеслав типографияһында баҫылып сыға. Ҡитаптың аҙаҡҡы битендә Ғарифулла Ҡейеков тарафынан Ризаиддин бин Фахретдингә яҙылған бүләк хаты бар. Ҡитап эсендә ҡулдан яҙып беркетелгән биттәр ҙә һаҡлана. Улар Р.Фәхретдин тарафынан яҙып һалынған булырға тейештәр, сөнки ғалимдың архив материалдарында һаҡланған ҡулъяҙмаларҙың яҙыу рәүеше менән бик оҡшаштар.

Шулай итеп, беҙ тулы ышаныс менән был төпләмәнең Риза Фәхретдиновтың шәхси китапханаһында һаҡланған китаптарҙың береһе тип иҫбатлай алабыҙ.

Төпләмәнең өсөнсө китабы булып Хөсәйен Әмирхановтың “Тауарих-и Болғариә. Ат-тәхиб мән әт-тауарих. Ән тәғәб әт-тауарих әл-мәтғелдәт әр-рисәләтү-л мәтәғалдәт” йыйынтығы тора. Ҡитап Ҡазанда Вячеслав типографияһында мәхдүм Мөхәмәдзариф мулла Хөсәйен улының (авторҙың улы. — ***Авт.***) хәрәжәтләре менән 1883 йылда баҫтырыла. Ҡитап бөтәһе 88 биттән тора. Ҡитапта Мөхәммәдхан Абу-л Ғази Баһадир-хан, Чингиз-хандың тыуыуы, Тимер Әмир, Болғар еренең өләңдәре һәм шәйехтәре, шулай уҡ Ҡазан һәм уның ғалимдары хаҡында байтаҡ мәғлүмәт бирелә.

*“Шараъитү-л иман шарттары һәм башында уҡыуҙы тиҙерәк белмәктең низамы менән” әҫәре, титулы*


شرايط الايمان

هم باشنده اوقونى تيزرك بلمكنك نظامى برله

محرر محمد سليم اميد بايى

بو كتابنك باصمه سنه رخصت بيرلدى سانكت پيتربورغده

٣٠ نچى سينتابرده ١٨٩٧ نچى يلده

باصمه اولنمشدر قزانده دومبراوسكى نينك باصمه خانه سنده

١٨٩٧ نچى يلده

Дозволено цензурою. С.-Петербургъ 30 Сентября 1897 года.
Типографія Б. Л. Домбровскаго въ Казани.

М.Өмөтбаевтың Ғилми китапханала һаҡланған өсөнсө китабы — “Шараъитү-л иман шарттары һәм башында уҡыуҙы тиҙерәк белмәктең низамы менән”. Автор үҙен: “мөхәррир Мөхәммәдсәлим Өмөдбаев” тип билдәләй. Ҡитаптың баҫылыуына Санкт-Петербургта 1897 йылдың 30 сентябрендә рөхсәт бирелгән. Ул Ҡазан ҡалаһында Домбровский баҫмаханаһында 1897 йылда нәшер ителә һәм бөтәһе 48 биттән тора.

“Шараъитү-л иман шарттары һәм башында уҡыуҙы тиҙерәк белмәктең низамы менән” китабы “өн методы” бу йынса төҙөлгән әлифба булып тора. Ул “Беренсе сабаҡ. Ялғыҙ хәрефләр. Баш хәрефләр. Артҡы хәрефләр. Икенсе сабаҡ. Төрки телендә мөштәрәк ... Иман инанмаҡтыр иманды мәғәнәсе берлә

белмәк фарыздыр”, — тигән бүлексәләрҙән тора һәм артабан дин тәртиптәренә лә туҡталып китә. Мәҫәлән “Аҙан будыр”, “Ауыҙ асҡанда бу сүрә уҡыладыр”, “Намаҙ ниәтләре будыр”, “Йома намаҙының ниәтләре”, “Ҡәҙер намаҙы будыр” тигән бүлексәләрҙә намаҙ уҡыу, ауыҙ асыу һәм башҡа дин тәртиптәрен өйрәтә. Автор китапты мөнәжәт менән һәм “тәстиф (яҙыусы. — ***Авт.***) Мөхәммәдсәлим” тип тамамлай. Әйтергә кәрәк, был ваҡытта М.Өмөтбаев Өфөлә Диниә назаратында тәржемәселек вазифаһын башҡара һәм титулярный советник дәрәжәһенә эйә була.

М.Өмөтбаевтың тел өлкәһендәге иң ҙур хеҙмәте булып “Татар нәхүсенең мөхтасары” (“Ҡыҫҡаса татар грамматикаһы дәреслеге”) тора. Ҡитап Ҡазанда Б.Л.Домбровский баҫмаханаһында 1901 йылда Мирза Ибраһим Тереғолов нәшере менән баҫтырыла.

Титул битендә автор тарафынан китаптың яҙылыу тарихына бәйле мәғлүмәт бирелә: “Ходай Тәғәләнең рәхмәте илән башҡорт үә татар ахундаларе бер нишан (эҙ, яҙма. — ***Авт.***) улсун үә ғилемнең ишараты илән хәйер-доға өмөт итеп мәғрүб данәшмәнләренең (ғалимдарының. — ***Авт.***) низамынча тәсниф ҡылараҡ язып ҡалдырдым. Әс-синағ шәрҡиййә тәржемәне титулярный советник Мөхәмәдсәлим бин Ишмөхәмәд Өмөдбаев Йомрани 1900-нче йылда.

1898-нче йыл Өфө шәһәрендә ҡазыйлар үә ахундалар һәм мирзалар ғилем үә мәғрифәт мәжлесенә жыйылыб дәсткир үә нәмунә улырлыҡ һөнәр китабларны төзөмәккә итфаҡ ҡылыб татар һәм фарсы нәхүләренә әүәлдән эшне улдағым өчөн без фәҡиргә ишарат ҡылдылар без һәм ғәитдә заруры тейеү бу татар нәхүсене ғайриләрендән мәҡдүм язмаҡны тейешлерәк күреп әлхәмдүиллә рабби әл-ғалимин мохтәсар язып тамам ҡылдыҡ үә саллаллаһу ғәләйһи Сәидне Мөхәмәд үә лә үә сәхәбә әжмәғин”.

*“Татар нәхүсенең мөхтасары”, титул*


تاتار نحوسی نینک مختصری

Дозволено цензурою. С-Петербургъ 13 Марта 1901 г.

Казань.
Типографія Б. Л. Домбровскаго.
1901.

Нәшер ителеүгә бәйле: “Дозволено цензурою С.-Петербург, 13 марта 1901 г., Ҡазань, типография Б.Л.Домбровского, 1901”.

Ҡитап яҡшы һаҡланған, бөтә биттәре лә бар һәм башҡа татар грамматикалары менән бер төпләмәлә төпләнгән 4-се китап булып иҫәпләнә. Төпләмәнең төрлө йылдарҙағы хужалары тураһында һөйләгән штамп тар ҙа яҡшы һаҡланған, мәҫәлән: Х.А.Ахтямов, Библиотека БНИИ педагогики.

Ҡитаптың һуңғы битендә ошондай юлдар бар: “Әл-хәмдү лиллә рабба әл-ғәләмин, бу ҡысҡа нәхүне тәсниф ҡылдым Өфө губернасы һәм өйәзе Йомран-табын иленең Йомран Ибраһим ҡарйәсендә титулярный советник һәм кавалер Мөхәмәдсәлим бин Ишмөхәмәд Өмөдбаев 1900-нче йылда.

“Татар нәхүсенең мохтәсары” китабы түбәндәге бүлектәрҙән ғибәрәт:

1. Татар нәхүсе;
2. Хәреф хасыяты;
3. Йөмләнең олуғ ҡысымлары;
4. Йөмләнең кечек ҡысымлары;
5. Ҡилем иштиҡаҡи;
6. Исем сифат;
7. Һан исемләре;
8. Исем кинәйәләре хаҡында;
9. Фиғел асылы;
10. Заман хәл;
11. Сығатай лөғәтендә;
12. Тынышлар хаҡында.


ЗВѢРИНЕЦЪ.

ПРИГЛАШЕНІЕ ЮНОШЕСТВА
КЪ
ЯСНѢЙШЕМУ СОЗЕРЦАНІЮ ЖИВОТНАГО ЦАРСТВА,
ИЗОБРАЖЕННАГО
ВЪ ШЕСТНАДЦАТИ КАРТИНАХЪ.

ТЕКСТЪ ЗАИМСТВОВАНЪ ИЗЪ ЛУЧШИХЪ ИСТОЧНИКОВЪ ПО ЧАСТИ ЕСТЕСТВОЗНАНІЯ.

САНКТПЕТЕРБУРГЪ.
ВЪ ТИПОГРАФІИ ИМПЕРАТОРСКОЙ АКАДЕМІИ НАУКЪ.

*М.Өмөтбаевҡа 1857 йылда Неплюев кадет корпусында уҡығанда бүләк ителгән китап титулы*

Ғалимдың “Оренбург духовный собранийә мәхкәмәсенең йөз йыллығы һәм әүүәле ҡырында булған әмерләрнең ҡысҡа тәуарихы. Отчет йөзөндән 1897 йыл” тигән артабанғы китабы Өфөлә 1903 йылда донъя күрә. Авторы “Мөфти Титулярный советник Мөхәмәдсәлим Ишмөхәммәт уғлы Өмөдбаев” тип бирелә. Ҡитап Ырымбур Духовное собраниеһының 100 йыллығы айҡанлы Диниә назаратының эшләгән эштәрен күрһәтеү ниәте менән сығарыла. Ҡитап отчет формаһында төҙөлгән. Унда Духовное собраниеның эш барышындағы документтары, әмерҙәре килтерелә. Сағыштырмаса ҡалын ғына китап (87 биттән тора) рус һәм иҫке төрки телендә яҙылған. Цензура тарафынан Санкт-Петербургта 1901 йылдың 14 декабрендә рөхсәт бирелә.

Ғилми китапханала һаҡланған ҡулъяҙмаларынан ғалимдың “Фарсы нәхүсе” (“Фарсы грамматикаһы”) хеҙмәтен билдәләй алабыҙ. Автор ҡулъяҙманы 1904 йылдың май айында Өфөлә тамамлаған. “Представляю отпечатать купцу Хасану Каримову, 6 ноября 1905 г. г.Уфа. Автор титулярный советник хажи Мухаммед-Салим Уметбаев” тип тамамлай.

Ҡулъяҙма бөтәһе 73 биттән тора. Бында автор тел мәсьәләләренә генә туҡталмай, миҫалға үҙенең шиғырҙарын фарсы телендә лә килтерә. Шулай итеп, ул үҙен фарсы теленең бөтә нескәлектәрен белгән ғалим-шағир итеп күрһәтә.

Ҡулъяҙманың артабанғы яҙмышы тураһында ла бер аҙ мәғлүмәт бирергә була. Мәҫәлән, 1946 йылдың 22 мартында ул китапханасы Г. Үмеркаев тарафынан биттәре һаналып теркәлгән. Йәғни ошо ваҡытҡа ҡәҙәр уға иғтибар итеүсе кеше булмаған.

Ғалимдың үҙе яҙған хеҙмәттәренән тыш, уның шәхси китапханаһында һаҡланған китаптары ла беҙҙең китапханаға айырым бер бәҫ һәм олпатлыҡ өҫтәй. Был китаптар ғалимдың ниндәй йүнәлештә эшләгәнен, ниндәй мәсьәләләр менән ҡыҙыҡһынғанын, борсолғанын сағылдыралар. Мәҫәлән, уларҙың бер нисәһен генә һанап үтәйек: 6 томлыҡ “Живописное путешествие по Азии”



Воспитаннику Оренбургскаго-Неплюевскаго Кадетскаго Корпуса Мухамметъ Селиму Умитбаеву отъ Воспитательнаго Комитета, въ награду за отличные успехи въ наукахъ и отличное поведение. 1857 год.

ЕГО ИМПЕРАТОРСКОМУ ВЫСОЧЕСТВУ

КНЯЗЮ

ЕВГЕНІЮ МАКСИМИЛІАНОВИЧУ

ВСЕПРЕДАННѢЙШЕ ПОСВЯЩАЕТЪ ИЗДАТЕЛЬ

*“Зверинец” китабы менән бүләкләү тексы*

(М., 1839—1840) әҫәренең беҙҙә 5-се томы ғына һаҡлана; Нофаль И.Г. “Курс мусульманского права, читанный в 1884—1885 гг.”, француз теленән тәржемә (СПб., 1886); Торнау Н.Е. “О праве собственности по мусульманскому законодательству” (СПб., 1882) һ.б.

Ошондай китаптар араһынан айырыуса береһе иғтибарҙы йәлеп итә — ул 1857 йылда Мөхәммәтсәлим Өмөтбаевҡа Ырымбурҙа Неплюев кадет корпусында уҡығанда фәндәрҙә өлгәшкән уңыштары һәм яҡшы тәртибе өсөн Тәрбиәселәр комитеты тарафынан бүләк итеп бирелгән “Зверинец: Приглашение юношества к яснейшему созерцанию животного царства, изображенного в шестнадцати картинах. Текст заимствован из лучших источников по части естествознания” (СПб., 1852) китабы.

Был китаптар М.Өмөтбаевтың шәхси китапханаһынан ейәне тарафынан Башҡортостанды өйрәнеү йәмғиәте китапханаһына тапшырылған булған. Артабан улар Башҡортостан милли культура ғилми тикшеренеү институты (хәҙерге Тарих,тел һәм әҙәбиәт институты) китапханаһынан беҙҙең Ғилми китапханаға килеп эләккән. Бөтә китаптарҙа ла М.Өмөтбаевтың шәхси штампы, ә ҡайһы берҙәрендә уның ҡултамғаһы ла бар.

Ғалимдың хеҙмәттәрен, шәхси китаптарын барлап үткәндән һуң шундай фекергә киленә: беҙгә, китапхана хеҙмәткәрҙәренә, Мөхәмәтсәлим Өмөтбаевтың республика китапханаларында йәиһә шәхси архивтарҙа булған китаптарының экземплярҙарының, архив яҙмаларының иҫәбен билдәләгән бер хеҙмәт эшләргә кәрәк. Был киләсәктә ғалимдың ижади мираҫын, башҡорт әҙәбиәтен һәм мәҙәниәтен өйрәнеүсе белгестәр өсөн файҙалы фактик сығанаҡ булыр ине.